# Йәш хәбәрсе

"Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,

Атам теле, әсәм теле – минең телем".

З.Биишева.



Декабрь № 12, 2019 йыл

Талбазы ауылы Лицейы муниципаль
бюджет дөйөм белем учреждениеһы

## 3 декабрь – Халыҡ -ара инвалидтар көнө



1992 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генерал Ассамблеяһы тарафынан 3 декабрь- Халыҡ-ара инвалидтар көнө тип иғлан ителде.

Уның маҡсаты: инвалидтарға ҡарата иғтибарҙы арттырыу, уларҙың йәшәү шарттарын яҡшыртыу, хоҡуҡтарын һаҡлау, социаль яҡтан ярҙам күрһәтеү.

Иптәштәре менән аралашыуҙан мәхрүм булған балаларҙы Лицей уҡыусылары Яңы йыл менән ҡотларға барҙы.

## Ярҙам



– Һәр мохтаж кешегә ярҙам итергә әҙербеҙ! – ти V «Б» синыфы уҡыусылары.
Башланғыс синыфтан күсеүҙәренә дүрт ай ғына булыуға ҡарамаҫтан, улар ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бик күп изге эштәр башҡарырға өлгөрҙө.

Ә инде Халыҡ-ара инвалидтар көнөнә арнап бер сара үткәргәндән һуң, уҡыусыларым донъяға бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарай башланы. Китапхана хеҙмәткәрҙәре һаулығы буйынса мөмкинлеге сикләнгән балалар һәм үҫмерҙәргә Шыршы байрамы уҙғарышырға ярҙам итеүҙәрен һорағас, ҡуш ҡуллап риза булдыҡ. Һәр ҡыҙ һәм малай үҙ өлөшөн индерергә тырышты. Ярты синыф йыр, бейеү, шиғыр һөйләү буйынса оҫталыҡтарын күрһәтһә, икенселәре иһә оло йәштәге апай-ағайҙарға ярҙамға йөрөүҙәрен дауам итте. Улар араһында эшһеҙ тилмереп йөрөгән уҡыусы юҡ.

Бөтә балаларҙың да изге күңелле, сәләмәт булыуын теләйбеҙ. Етеп килгән Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ, – ти бишенселәрем.

Рәйсә Усмановна, класс етәксеһе

## БАЙРАМ КИЛӘ, БАЙРАМ КИЛӘ...
## ШАТЛАНЫП АТЛАЙ-АТЛАЙ...

Яңы йыл балаларҙың да, өлкәндәрҙең дә көтөп алған байрамы. Мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында шыршы байрамын шаулап- гөрләп үткәрәләр.Быйылғы Яңы йыл байрамдары оҙаҡ хәтерҙә ҡалһын өсөн, лицей уҡыусылары ихлас күңелдән әҙерләнделәр.

1-8 класс уҡыусылары мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре һәм уҡыусылар тарафынан әҙерләнгән “Морозко” әкиәтен ҡаранылар. Әкиәт барыһына ла оҡшаны. Башланғыс класс балалары шыршы тирәләй йырҙар йырлап әйләнделәр, төрлө уйындар уйнанылар. Ҡыш бабайҙың ҡулдарынан бүләктәр алдылар.

9-11 класс уыусыларын Ҡыш бабай Яңы йыл менән ҡотланы, дискотека ойошторолдо.





## Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы



XIX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт әҙәбиәтенең иң күренекле вәкилдәренең береһе Мифтахетдин Камалетдин улы Аҡмулла хәҙерге Миәкә районы Туҡһанбай ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Аҡмулла үҙ ауылы, күрше Мәнәүезтамак, Әнәс ауылдары мәҙрәсәләрендә лә уҡый. Троицк мәҙрәсәһендә уҡыған осорҙа ҡаҙаҡ далаларына сығып үҙе лә балаларға белем бирә, аҙаҡ мөлдәкә(уҡытыусы) һәм Аҡмулла исемен алған шағир булып танылa.

Йәштән үк аң – белемгә ынтылған Мифтахетдин, мәҙрәсәләрҙә уҡытылған дини тәғлимәт менән генә сикләнмәйенсә, ғәрәп – фарсы телле көнсығыш классик әҙәбиәтен дә ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Дини уҡытыуҙың кимәле, сифаты, уҡыу шарттары менән риза булмай, быға ҡаршы асыҡ протест белдерә.

Берҙән – бер мөлкәте булған китаптар менән тулы арбаһында ауылдан –ауылға, йәйләүҙән – йәйләүгә күсенеп, ул ярлы халыҡтың аһзарын күреп йөрөй, ошо хаҡтағы уйланыуҙарын, һыҙланыуҙарын шиғри юлдарға күсерә. Үҙенең шиғырҙарын ул халыҡ алдында ла уҡып ишеттерә, сәсәндәр йәки аҡындар менән төрлө әйтеш ярыштарында ла ҡатнаша. Башҡорттар араһында ғына түгел, ҡаҙаҡтар, татарҙар араһында ла йәшәп, белем таратып, һөнәрле булырға өндәп йөрөгәнлектән, ошо халыҡтарҙың һәр ҡайһыһы уны үҙ шағиры итеп яҡын күрә, хөрмәтләй.

Сәсән - шағир булараҡ, Аҡмулла үҙенең шиғырында заманының актуаль проблемаларын күтәрә, үҙенең мәғрифәт уҡтарын наҙанлыҡҡа, томаналыҡҡа, мәҙәниәтһеҙлеккә ҡаршы йүнәлтә. Халыҡтың тормошон еңеләйтеү, азатлыҡҡа илтеү юлын ул ошо мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә күрә. Революцияға тиклем Аҡмулланың шиғырҙары өс китап булып баҫылып сыға. Бөгөнгө уның башҡорт, рус, татар, ҡаҙаҡ телдәрендә һайланма әҫәрҙәренән торған шиғри йыйынтыҡтары бар.

Яҡтылыҡ йырсыһы Мифтахетдин Аҡмулланың ғүмере 1895 йылдың октябрендә Миәс ҡалаһынан йыраҡ түгел ерҙә фажиғәле өҙөлә.

Күҙ һалып ҡарағыҙсы һәр тарафҡа -
Донъяла асылғандай тимер ҡапҡа.
Һин дә инде һөнәргә ынтыл, хәрәкәт ҡыл,
Талпынып һөнәр өсөн быҙдай саҡта! -

тип оран һала үҙенең “Уяныу” шиғырында бәйөк шағир - мәғрифәтсе Аҡмулла.

## Ҡыш бабайға һәйкәл

Ҡыш бабайҙың прототибы донъяға беренсе тапҡыр быуатта Византия дәүләтендә барлыҡҡа килгән.Урта диңгеҙ буйындағы кескәй генә ауылда бик кешелекле, балаларҙы ихлас яратҡан Николай исемле ҡарт йәшәгән. Ана шул ҡарт ҡышҡы һалҡындарҙа йорттан - йортка кереп , балаларға бүләктәр таратып йөрөгән. Тора - бара кешеләр уны изгеләштереп Ҡыш бабай тип йөрөтә башлағандар. Яңы йылда бер-береңә бүләктәр бирешеү, яҡындарыңды шатландырыу кеүек матур ғәҙәттәр ҙә ана шулай барлыҡҡа килгән.

Төркиәлә бөгөн дә йомарт Ҡыш бабайҙы онотмағандар. Уға һәйкәл ҡуйылған. Изге Николайҙың бүләктәр тултырылған кәрзин тотҡан, балалар уратып алған был һәйкәле Төркиәнең Демре ауылында оҙаҡ быуаттар буйына һаҡланып килә.

Эй Ҡыш бабай, Ҡыш бабай –
Беҙгә иптәш, дуҫ бабай,
Әйҙә бергә уйнайыҡ,
Сана шыуып туймайыҡ...






Ҡыш бабайҙар парадынан күренештәр

Лицей территорияһында директорҙың уҡытыу- тәрбиә урынбаҫары, хеҙмәт дәресе уҡытыусылары, өлкән пионервожатый етәкселегендә тиҙ арала “Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, Сысҡан” фигуралары ҡалҡып сыҡты.




Мөхәрририәт: башҡорт теле уҡытыусыһы Булатова Г.М., 11 класс уҡыусылары